## Уҡыусыларҙың ижади һәм фәнни-эҙләнеү эштәренә төп талаптар.

Һуңғы йылдарҙа мәктәп уҡыусыларының ижади фекерләү һәләтен, интеллектын, фәнгә ынтылышын үҫтереү маҡсатында Бөтә Рәсәй, Республика, район кимәлендә төрлө бәйгеләр, конкурстар йыш үткәрелә.

Беҙҙең районда ла йыл да уҙғарылған иншалар һәм фәнни-эҙләнеү эштәре конкурстарының һөҙөмтәләре төрлөсә була. Юғары баһа алған эштәр менән бергә кимәле түбән булғандары ла осрай. Уҡытыусыға һәләтле уҡыусыларҙы конкурсҡа һайлап алыу, уларға тема һәм эш биреү генә етмәй, әлбиттә. Ул, ғилми етәксе булараҡ, уҡыусыһын баштан алып аҙаҡҡаса ысын мәғәнәһендә етәкләп барырға, өйрәтергә, кәңәштәре менән ярҙам итергә, проекттың бөтә этаптарында ла бергәләп эшләргә тейеш. Ә уның өсөн уҡытыусының үҙенә лә ижади эштәргә булған талаптарҙы яҡшы белергә кәрәк.

Уҡыусыларҙың эштәрендә асылып бөтмәгән тема, ярлы йөкмәтке генә түгел, ә дөрөҫ булмаған оформление, аҙ күләм дә төп етешһеҙлектәр булып тора.

Инша – баланың үҙ фекерен, белемен, уйҙарын, донъяға ҡарашын сағылдырған ижади яҙма эш. Уны ҡайҙандыр күсереп алған реферат, конспект менән бутарға ярамай. Уның үҙ композицияһы, йәғни төҙөлөшө бар. Мәҫәлән, йорттоң нигеҙе, стеналары һәм ҡыйығы булған кеүек. Әгәр бер генә өлөшө етешмәһә лә, был инша булмай.

Инеш өлөштә төп темаға кереш, асасаҡ проблемаға ҡағылышлы дөйөм мәғлүмәт, тарихи осор, автор тураһында үҙ фекереңде (темаға ярашлы булһа ғына) яҙыу етә.

Төп өлөшкә бирелгән теманы дөрөҫ аңлау, уны логик рәүештә эҙмә-эҙлекле аса белеү, аргументтар, факттар, миҫалдар менән нығытыу инә. Улар дөрөҫ һәм тулы, ә фекерҙәр тәрән һәм үҙеңдеке булырға тейеш.

Йомғаҡлауҙа яҙылғандарҙы дөйөмләштерергә, бирелгән темаға, проблемаға, әҫәргә һығымта яһарға, төп фекерҙе ҡыҫҡа, ләкин тос итеп төйнәү шарт.

Эпиграфты иншаның тажы, ижади эшкә асҡыс, тиҙәр. Ләкин уны һүҙмә-һүҙ белмәһәң, авторын иҫләмәһәң, дөрөҫлөгөндә икеләнһәң, иң яҡшыһы – уны ҡулланмаҫҡа, эпиграф өсөн генә баһа үҙгәрмәй.

План иншаның композицияһы өсөн, йөкмәтке эҙмә-эҙлекле, текст бәйләнешле булһын, тема тулыһынса асылһын өсөн кәрәк. Ләкин уны яҙыу-яҙмау уҡыусының иркендә. Ҡараламала ғына ҡулланыу ҙа етә.

Ижади эштәрҙең төрлө жанрҙарҙа үтәлеүе мөмкин: һүрәтләү, фекерләү, әҙәби-тәнҡит мәҡәләһе, рецензия, эссе, очерк, шиғыр, ҡобайыр, көндәлек, хат (эпистоляр), юлъяҙма рәүешендә яҙылған иншалар йөкмәткеле һәм уҡымлы була. Улар барыһы ла матур әҙәбиәт һәм публицистик стилдә башҡарыла.

иншалар йөкмәткеле һәм уҡымлы була. Улар барыһы ла матур әҙәбиәт һәм публицистик стилдә башҡарыла.

Ижади эштәрҙә цитаталарҙы самаһын белеп ҡулланыу, төрлө сығанаҡтарға һылтанмалар, халыҡ мәҡәлдәре, ҡанатлы һүҙҙәр – отошло алым. Ләкин уларҙы дөрөҫ яҙыу, таныш билдәләрендә хата ебәрмәү мөһим.

Иншалар ҡоро һүҙ һөйләүҙән, яланғас факттарҙан, иҫбатлауҙарҙан ғына торорға тейеш түгел, әлбиттә, уларҙың хис-тойғоға, һүрәтләү сараларына бай булыуы мөһим, темаға ҡағылышлы үҙ фекерҙәреңде асыҡ итеп һәм оригиналь рәүештә (жанр үҙенсәлеге) уҡыусыға еткерә белергә кәрәк.

Фәнни-эҙләнеү эштәре

лә 3 өлөштән тора- Инеш,Төп өлөш, Йомғаҡлау-Һөҙөмтә.

Ләкин уны башҡарыу этаптары күп һәм ҡатмарлы.

Беренсе этапта бирелгән тема, эҙләнеү өлкәһен өйрәнеү, проблема, маҡсат һәм бурыстар билдәләү, китапханала, Интернетта материал йыйыу, архивҡа, шаһиттарға мөрәжәғәт итеү, документтар туплау – йәғни, мәғлүмәт базаһы булдырыу.

Икенсе этап – ғилми етәксе менән эҙләнеү эшенең структураһын, төрөн өйрәнеү, теманың актуаллеген, бурыс-маҡсаттарҙың үтәлеш алымдарын, эҙләнеү объектын билдәләү, план төҙөү (былар барыһы ла инеш өлөштә күрһәтелә).

Өсөнсө этап: төп өлөш, йәғни объектты, проблеманы өйрәнеү, күҙәтеү, яңылыҡтар табыу, асыш яһау, уларҙың дөрөҫлөгөн иҫбатлау өҫтөндә эшләү: миҫалдар, факттар, аргументтар, схема, чертеж, график, таблицалар, слайдтар, фото, видео материалдары һ.б.

Дүртенсе этап: йомғаҡлау, һығымталар яһау өлөшө. Мотлаҡ рәүештә эҙләнеүсе асыш яһарға, уны иҫбат итергә, башҡаларҙы ла шуға инандырырға тейеш. Киләсәктә был фәнни эште дауам итеү өсөн эҙләнеүҙең мөмкин булған яңы варианттарын, яңы юлдарын күрһәтеү отошло.

Һәр өлөштөң аҙағында төп тезистар, һығымталар, йомғаҡлау булырға тейеш.

Бишенсе этап фәнни-эҙләнеү эшен яҡлау тип атала. Ғилми етәксе булған уҡытыусы уҡыусыһының эшенә рецензия яҙа, уны яҡлау барышында комиссия ағзалары алдында уҡып ишеттерә.

Ә уҡыусы фәнни эш менән түгел, ә алдан әҙерләнгән 5-7 минутлыҡ доклад менән сығыш яһай. Докладта бөтә эҙләнеү эше түгел, ә булған этаптарҙың иң мөһим тезистары ғына әйтелә, тәжрибә һөҙөмтәһе, график, таблица, фото,-ғөмүмән, өҫтәлмә материал күрһәтелә. Сығыш ҡыҫҡа, ләкин асыҡ һәм аңлайышлы, тос фекерле булырға тейеш.

Комиссия ағзаларының, оппоненттарҙың йәки тыңлаусыларҙың иғтибарын йәлеп итер өсөн үҙеңде ышаныслы тотоу, көр тауыш, дөрөҫ

интонация бик мөһим. Сығышты ҡыҙыҡлы яңылыҡтан, миҫалдан йәки цитатанан башларға ла мөмкин. Комиссияның һорауҙарына ҡаушамай, аныҡ яуап бирергә, тәүҙә һорау өсөн рәхмәт белдерергә (улар һинең эшең менән ҡыҙыҡһына бит)кәрәк, ә яуабың юҡ икән, "Киләсәктә был йүнәлештә эшемде дауам итәсәкмен, проблеманы өйрәнәсәкмен", - тип вәғәҙә бирергә мөмкин.

Биҙәлеше

Бөтә ижади һәм фәнни-эҙләнеү эштәренең дә <u>Титул бите</u> була. Уның башында Республика, район һәм уҡыу йортоноң рәсми исемдәре тулыһынса күрһәтелә. Уртала тема тырнаҡтарһыҙ яҙыла, нөктә ҡуйылмай, "тема" тигән һүҙ ҙә кәрәкмәй. Уң яҡтан аҫтараҡ уҡыусының фамилияһы, исеме, атаһының исеме, уҡыған класы күрһәтелә. Ғилми етәксенең исем-шәрифтәре лә мотлаҡ. Иң аҫта уртала ҡала йәки ауыл исеме, йыл яҙыла ("йыл" һүҙе кәрәкмәй): Мораҡ-2012. Шрифт ҙурлығы 18-24 nm (титул бите өсөн).

2-се бит: Йөкмәтке (оглавление). Унда эҙләнеү эшенең өлөштәре, уларҙың исемдәре һәм биттәре күрһәтелә.

3-сө бит: <u>Маҡсат</u> һәм <u>бурыстар.</u>

Уларҙы бутарға ярамай: маҡсат – ул фәнни проблеманы хәл итеүҙә үҙең теләгән һуңғы һөҙөмтәгә өлгәшеү; ә бурыс – маҡсатты асыҡлау һәм уға өлгәшеү өсөн кәрәк алымдар.

Артабан <u>Инеш</u>, <u>Төп өлөш</u>, <u>Йомғаҡлау</u> китә.

Унан һуң <u>Ҡушымта </u>(өҫтәлмә материал) ҡуйыла: чертеж, фото, слайд,таблица һ.б.

Иң аҙаҡтан <u>Ҡулланылған әҙәбиәт</u> исемлеге тултырыла. Ул мотлаҡ алфавит тәртибендә булырға тейеш. Автор, китаптың исеме, ҡалаһы, нәшриәт, сыҡҡан йылы күрһәтелә; гәзит – журналдар өсөн исеме, номеры, датаһы кәрәк.

Цитата, һылтанмалар текста тырнаҡтар эсенә алына, улар тамамланғас, һөйләм аҙағында квадрат йәйәләр асып, сығанаҡтың номерын (ҡулланылған әҙәбиәт исемлегендәге тәртип һаны) һәм китаптың цитата алынған бите күрһәтелә. Мәҫәлән: (2,15-се бит).

Ижади эштәрҙең һәр бите билдәләнә, Титул бите – 1-се, ләкин ул яҙылмай, йөкмәтке – 2-се һ.б. Шрифттың ҙурлығы: 12-14, юлдар араһы 1,5-2, полялар һулдан – 30 мм, уңдан – 10 мм, өҫтән һәм аҫтан: 20-шәр мм.

Ижади уңыштар һеҙгә!